# Башҡорт һәм рус донъяуи тел картинаһында “туған тел” концепты

**Эҙләнеү эшенең авторы**: Сатлыков Шамил
**Авторҙың мәктәбе һәм класы:** Ауырғазы районының Талбазы ауылының икенсе мәктәбенең 6-сы класс уҡыусыһы
**Ғилми етәксеһе:** Сатлыкова Гөлнара Сынғыҙ ҡыҙы

# Теле барҙың иле бар.

Башҡорт теле.

Зәйнәб Биишева.

Моң шишмәһе һандуғастай
йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай
нәфис тә һин.
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы
ла һин,
Эй, илһамлы, эй хөрмәтле
башҡорт ***теле***!



**<u>Эҙләнеү максаты:</u>** “Туған тел” концепт-һүҙенең башҡорт һәм рус донъяуи тел картинаһындағы ролен күрһәтеү.

**Бурыстары:**

- башҡорт һәм рус халҡында туған тел һүҙенең ҡулланылышын күҙәтеү;
- туған тел һүҙенең мәғәнәһен асыу;
- был һүҙҙең фольклорҙа, әҙәби әҫәрҙәрҙә ҡулланылыуын күҙәтеү;
- туған тел һүҙенең мәғәнәһен класташтарымдың аңы, көнкүреше, донъяға ҡарашы аша асыу,
- һүҙлек байлығын артттырыу.

**<u>Эҙләнеү объекты:</u>** туған тел һүҙенең мәғәнәһе, ҡулланылышы

**<u>Эҙләнеү субъекты</u>:** башҡорт теле һүҙлектәре, әҙәби әҫәрҙәр

**<u>Актуаллеге:</u>** туған тел һүҙенең башҡорт теле һәм әҙәбиәтендә тотҡан урынын һәм әһәмиәтен асыҡлау.

# Ассоциатив эксперимент

**Туған тел һүҙе ниндәй ассоциациялар тыуҙыра?**

1. **Кешеләрҙе белдереүсе һүҙҙәр**: атай, әсәй, туғандарым. (5 кеше)
2. **Административ берәмек һәм учреждение исемдәрен белдереүсе һүҙҙәр**: өй, балалар баҡсаһы,  ауыл, мәктәп, урам. (4 кеше)
3. **Тел атамаларын белдергән һүҙҙәр**: кеше, халыҡ, милләт, тыуған ер. (5 кеше)
4. **Халыҡтың үҙенсәлеген белдереүсе һүҙҙәр**: йолалар, аш-һыуҙар, милли кейем-һалымдар. (2 кеше)
5. Шулай уҡ, **тел тиһәк**, Рәсәй, Башҡортостан күҙ алдына килә. (3 кеше)
6. **Коштарҙы белдергән һүҙҙәр**: һандуғас, күгәрсен. (1 кеше).
7. **Һүҙбәйләнештәр ярҙамында аңлатма биреү**: тыуған тел, башҡорт теле, рус теле, минең телем, әсә теле
8. **Һүҙҙәр ярҙамында аңлатма биреү**: ғорурлыҡ, һөйөү, хөрмәт, шатлыҡ.



# “ТУҒАН ТЕЛ” КОНЦЕПТ-ҺҮҘЕ ҺҮҘЛЕКТӘРҘӘ

**Башҡортса-русса һүҙлектә:**

Тел – язык

Һүҙбәйләнештәр: тел белгесе – языковед, тел ғилеме – языкознание, туған тел – родной язык.

**Фразеологизмдар**:

Тел асылыу – һүҙ башлау.

Тел бәйләнеү – берәй сәбәптән әйтер һүҙҙе әйтә алмау.

Телгә һалышыу – күп һөйләү.

Тел ҡысыу – кәрәкмәгәнде әйтергә ынтылыу.

Теленә шайтан төкөргән – телгә оҫта.

**Синоним**:

Туған тел – әсә теле.



- Ғалимдар билдәләүенсә, донъяла яҡынса 3 мең туған тел бар. Тел концептының тәржемәһе: язык (русс.), language (ингл.), мова (укр.), taal (афр.), тіл (каз.), Sprache (нем.), språk (швед.), 言語 (япон.).



# ҺҮҘ МӘҠӘЛ ҺӘМ ӘЙТЕМДӘРҘӘ

## Башҡорт халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәре

Иле барҙың теле бар, теле барҙың көнө бар.
Тел асҡысы – ил асҡысы.
Телдән тел уҙа, ҡулдан ҡул уҙа.
Тел дә яңаҡ үҙендә.
Телен тыйған – аҡыллы.
Теле юҡтың иле юҡ, иле юҡтың көнө юҡ.
Тел өҫтөндә бал, тел аҫтында тал.
Тел һөйәкһеҙ, уй төпһөҙ.
Терелткән дә тел, үлтергән дә тел.
Тик тормаған телдә бәлә бар.

## Рус халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре

- Кто любит Родину, любит и свой родной язык.
- Язык языку весть подает.
- Бритва скребет, а слово режет.
- Вертит языком, что корова хвостом.
- Умен тот, кто держит язык за зубами.
- Без языка нет Отчизны, без Отчизны нет жизни.
- Над языком – мед, под языком – лед.
- Язык без костей, дума без дна.
- Слово лечит, слово и калечит.
- Кто много болтает, тот беду на себя накликает.



# ҺҮҘ ӘҘӘБИ ӘҪӘРҘӘРҘӘ

Рәми Ғарипов.

**Туған тел.**

Халҡым ***теле*** миңә-хаҡлыҡ ***теле,***
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә ***телен*** һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына ***теле*** юҡ!

К народам-братьям с ним прийти я вправе,
Чтоб он звучал средь ***языков*** других.
Кто низким вздумал бы ***язык*** наш ставить,
Сам не высок тот в помыслах своих.



# Бөйөк шәхестәрҙең афористик һүҙҙәре:

- Донъяла һәр кемгә ҡәҙерлеһе – үҙ ***туған теле.*** Үҙ ***туған теле*** барҙың үҙ туған рухы бар. Ғайса Хөсәйенов.

- Как ни говори, а ***родной язык*** всегда останется родным. Когда хочешь говорить по душе, ни одного французского слова в голову нейдет, а ежели хочешь блеснуть, тогда другое дело. Лев Николаевич Толстой.

- Величайшее богатство народа — его ***язык***. Михаил Александрович Шолохов.



# Башҡорт халыҡ ижадында

* Ғилмияза ят илдә үҙенең йөрәк бауырынан һөйләшерлек кеше тапмаған. Тапһа ла, ***телдәрен*** аңлай алмай, ауырлыҡ өҫтөнә ауырлыҡ кисергән. ***(Башҡорт халыҡ ижады: Ғилмияза риүәйәте).***

* - Был ниндәй ҡарт? – тип һораған.

  - Беҙҙең атай, тигән егеттәр.

  - Ниңә ул йә йылмая, йә бик моңһоу күренә?

  - Сөнки ул ҡоштар ***телен*** аңлай. Бәлки, ана тегендә, урман эсендә, һайрашҡан ҡошсоҡтарҙың йырын тыңлайҙыр ҙа улар менән йә шатлана, йә ҡайғыра торғандыр. ***(Башҡорт халыҡ әкиәте: Яҡшы һүҙ – йән аҙығы).***



# ҺҮҘ СӘНҒӘТТӘ

Йырҙарҙа

Картиналарҙа

* M.Сәлимовтың Р.Шәкүр һүҙҙәренә яҙылған “Ерем, илем, телем” йыры.

**Ерем, илем, телем**

1. Башҡорт **телендә** һөйләшәм,
Башҡорт **телендә.**
Минең йәшәү тамырҙарым
Башҡорт ерендә.

2. **Туған телем**, һин халҡымдың,
Былбыл тауышы.
Быуаттарҙан быуаттарға
Ҡанат ҡағышы.

3. Киң Уралым, йырлап аға
Һинең һыуҙарың.
Алыҫ-алыҫ яңғырайҙар
Һинең моңдарың.





# ПЛАКАТТАР:


Ты
знаешь
русский язык?


Туган тел
www.tugantel-tv.ru




Фестиваль
Русского языка
2012
Мы За
чистоту
родной
речи!
Избавимся от сорных слов!
Ага
Чё?
Клёвый!
Ща...




**ҺЫҒЫМТА:**

“туған тел” концепт-һүҙен уҡыусылар үҙҙәре йәшәгән, тыуған, уҡыған урын, яҡын кешеләре, халҡы, милләте менән бәйләй;

был һүҙ кешеләрҙең аңында ыңғай эмоциялар шатлыҡ, ғорурланыу, хөрмәт тойғолары тыуҙыра;

башҡорт тел картинаһында ла, рус тел картинаһында ла “туған тел” концепты төп концепттарҙың береһе һанала, шунлыҡтан ул мәҡәл һәм әйтемдәрҙә лә, сәнғәттә лә, әҫәрҙәрҙә лә йыш ҡулланыла.

Иғтибары
ғыҙ өсөн
рәхмәт!

